# Тема: Рәүеш

***Маҡсат:*** 1. Яңы һүҙ төркөмө рәүеш менән балаларҙы практик таныштырыу, һөйләмдә уның ҡайһы һүҙгә эйәреүен, ниндәй һорауға яуап биреүен аңлатыу; 2. Телмәрҙе антоним рәүештәр менән байытыу, һөйләмдәр төҙөтөү; синтаксик анализ күнекмәләрен камиллаштырыу; 3. Балаларҙа башҡорт теленә һөйөү хисе тәрбиәләү.

*Ҡулланмалар:* темаға ҡарата таблица, һүҙлек карточкалары, дидактик материал.

*Дәрес барышы.*

I. *Ойоштороу мәле.*

- Дәрескә әҙерһегеҙме, уҡыусылар?

- Бик күңелле ял иттек,<br>
Дәрес башлана хәҙер.<br>
Беҙ инде матур итеп<br>
Яуап бирергә әҙер.

- Улай булғас дәресте башлайыҡ.

*II. Үтелгәнде ҡабатлау. Өйгә эште тикшереү.*

- Уҡыусылар, беҙ һеҙҙең менән бер нисә һүҙ төркөмө өйрәндек. Өйҙә уларҙы ҡабатлап килергә ҡушылғайны. Улар нисек атала? (Исем, сифат, ҡылым, һан, алмаш.)

- Таҡтала сюжетлы картина эленгән. Был һүрәттән бер нисә исем табығыҙ әле. Исемдәр ниндәй һорауҙарға яуап бирә ?

- Исемдәргә сифаттар ҡушып һүҙтеҙмәләр уйлағыҙ.

- Ҡылымдар менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.

- Һан тураһында нимә әйтә алаһығыҙ?

- Алмаш нимә ул?

III. *Дәрестең маҡсаты менән таныштырыу.*

- Бөгөн беҙ яңы һүҙ төркөмө – рәүеш менән танышырбыҙ, һөйләмдә уның ҡайһы һүҙгә эйәреүен, ниндәй һорауҙарға яуап биреүен белербеҙ. Дәфтәрҙәргә число һәм дәрестең темаһын яҙып ҡуяйыҡ.

IV. *Яңы тема өҫтөндә эш.*

1. Түбәндәге һөйләмдәрҙе уҡытыусы алдан таҡтаға яҙып ҡуя:

Иртәнсәк һауа тып-тыныс тора ине. Ҡапыл көнбайыштан болоттар ҡабарып сыҡты. Агроном ҡыҙ пальтоһының яғаһын нығыраҡ күтәрҙе.

Шакир санаға аяҡ үрә баҫты ла атын шәберәк ҡыуаланы. Асы буран ҡоторған яланда улар, ужымды тикшереп, оҙак йөрөнөләр.

Һорауҙар һәм эш:

- Өҙөктө уҡығыҙ, һәр һөйләмдең баш киҫәктәрен табығыҙ һәм таҡта янына сығып, билдәләп ҡуйығыҙ.

- Ҡалын хәрефле һүҙҙәргә иғтибар итегеҙ. Хәбәрҙән сығып уларға һорауҙар ҡуйығыҙ.

- Тимәк, был һүҙҙәр ниндәй һорауҙарға яуап бирә? (Нисек? Ҡайҙа? Ҡасан?)

- Улар  һөйләмдең ҡайһы киҫәген асыҡлай? (Хәбәрҙе.)

- Үҙе ниндәй киҫәк булып йөрөй? (Эйәрсән киҫәк.)

- Телмәрҙә яҡшы, һәйбәт, ҡапыл, оҙаҡ, нығыраҡ кеүек һүҙҙәр осрай. Улар рәүеш тип атала. Рәүештәр Нисек? Ҡайҙа? Ҡасан? һорауҙарына яуап бирә. Һөйләмдә хәбәргә эйәрә. Һөйләмдәргә синтаксик анализ яһағанда рәүештәрҙе пунктир, нөктә, пунктир, нөктә менән билдәләйбеҙ.( _._._._ )

2. Дәреслек менән эш.

175 күнегеүҙе үтәү.

3. Ял минуты.

Ҡулдарҙы күтәрҙек, (*кулдарҙы күтәрергә)*

Аҫҡа төшөрҙөк. (*ҡулдарҙы төшөрөргә)*

Ҡулдарҙы йәйҙек, (*йәйергә)*

«Ҡайсы» эшләнек. (*ҡулдарҙы күтәреп, ҡайсы кеүек хәрәкәтләндерергә*)

Ҡулдар талдылар, (*һелккеләргә)*

Аҫҡа төштөләр. (*төшөрөргә)*

Урында йүгерҙек, (*йүгерергә)*

Яҡшы тын алдыҡ, (*тәрән һулыш алырға)*

Парта артына ултырҙыҡ. (*ултырырға)*

4. Нығытыу күнегеүҙәре.

Карточкаларҙа бирелгән һүҙҙәрҙән антонимдар һәм синонимдар табырға, улар менән мәҡәлдәр, һөйләмдәр уйларға һәм «антонимдар» йәки «синонимдар» тип яҙылған кеҫәләргә һалып барырға.

Һүҙҙәр: юғары, күп, йыш, алыҫ, иртә, былтыр,түбән, аҙ,
йәһәт, ҡапыл, өҙлөкһөҙ,тып-тын, һирәк, яҡын, кис, быйыл, йылдам, көтмәгәндә, туҡтауһыҙ, тыныс.

5. 177 күнегеүҙе үтәү.

- Көләмәсте уҡығыҙ.

- Ни өсөн Зилә мейес артына йәшеренде? (Юлбарыҫ килә тигәнгә.)

- Бында Юлбарыҫ януармы ул? (Юҡ. Ул Зиләнең ҡаланан ҡайтҡан ағаһы.)

- Юлбарыҫ һүҙе ҡайһы осраҡта ҙур, ә ҡайһы осраҡта бәләкәй хәреф менән яҙыла? ( Һөйләм башында килһә, йәки яңғыҙлыҡ исем булһа ҙур хәреф менән яҙыла, уртаҡлыҡ исем булып һөйләмдең уртаһында килһә бәләкәй хәреф менән яҙыла.)

- Ваҡиғаның ҡасан булыуын, уны автор үҙ күҙе менән күреү - күрмәүен әйтегеҙ. (Ваҡиға үткән заманда булған. Автор уны үҙ күҙе менән күргән.)

- Уны ҡайҙан белдегеҙ? (Тине, йыйыштырҙылар, көттөләр, йәшеренде ҡылымдарына ҡарап белеп була.)

- Ә хәҙер көләмәстә осраған рәүештәрҙе табайыҡ. (Иртән, бөгөн, бергәләп, бер аҙҙан.)

V. *Йомғаҡлау.*

- Уҡыусылар, бөгөнгө дәрес һеҙгә оҡшанымы?

- Беҙ бөгөн дәрестә нимә өйрәндек?

- Рәүеш ниндәй һорауҙарға яуап бирә?

- Миҫалдар әйтегеҙ.

- Рәүеш һөйләмдә ҡайһы һүҙҙе асыҡлай?

- Һүҙ төркөмдәрен һанап сығығыҙ.

VI. *Баһалау. Өйгә эш.*

178 күнегеүҙә бирелгән һүҙҙәргә ҡапма - ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр табып, кроссворд тултырырға кәрәк буласаҡ.